

**Александр Осипович Орловский. Һыбайлы башҡорт. 1823. Башкирский государственный художественный музей имени М.В. Нестерова.**

# «Һыбайлы башҡорт»

Күп йылдар элек «Советская Башкирия» гәзитендә М.Д. Нестеров исемендәге музейҙың ул ваҡытта Г. Пикунова ханымдың мәҡәләһе донъя күргәйне. Мәҡәләлә һүҙ музей архивында шул музейҙың хеҙмәткәре С. Мехрешвили тарафынан А.О. Орловскийҙың «Һыбайлы башҡорт» тигән һүрәтенә ҡағылышлы документ табылыуы тураһында барғайны. Документта, Шишмә районы Иҫке Ябалаҡлы ауылы кешеһе Хәмзә Иҫәнбаевтың күрһәтеүенә ҡарағанда, А.О. Орловскийҙың «Һыбайлы башҡорт» һүрәтендә Муллаҡай Иҫәнбаев төшөрөлгән. Хәмзә Муллаҡай Иҫәнбаевтың үҙенең картатаһы булыуын һәм уның 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуын да әйтеп киткән.

Был мәҡәлә мине ныҡ тулҡынландырҙы – һүҙ минең ауылдаш тураһында бара бит.



Нестеров музейында эленеп торған ваҡытында был һүрәттең кешеләрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуын унда барған һайын күрә инем.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, ауылда Муллаҡай Иҫәнбаев тураһында белеүселәр табылманы. Ә бына Хәмзә Иҫәнбаевты белеүселәр бар. Минең инәйем, Шәмсибәҙәр Ҡунаҡбай ҡыҙы Хисматуллина (1915 йылғы), бер ваҡыт Хәмзә бабайҙы ул аҡ йөҙлө, бәләкәй ҡара һаҡал-мыйыҡ ебәргән, урта буйлы кеше итеп хәтерләй. Бик тәүәккәл ҡарт ине, ти. Уның мылтыҡ-яһауҙары ла һәр ваҡыт ҡул аҫтында ғына булған. Хәмзә бабайҙың характерын иҫбатлаусы миҫал да килтерергә була – граждандар һуғышы йылдарында ауыл бер аҡтар, бер ҡыҙылдар ҡулына күсә. Һалдаттар килеүе менән мөгәрәп, баҙҙарға төшөп йәшенер булған. Ә Хәмзә бабай, күрше йорттарға күҙ-колаҡ булып, йәшеренгән кешеләргә ашарға-эсергә килтереп йөрөгән. Бер ваҡыт шундай хәл килеп сыға - Фәрихә тигән еңгәйҙе нисектер аҡтар күреп ҡала. Ҡулында имсәк балаһы булыуына ҡарамаҫтан, уны баҫтыра башлайҙар һәм тыҡырыҡты ҡамап алалар. Ҡатындың ҡысҡырған тауышына Хәмзә бабай килеп етә. Аҡтарҙы Хәмзә бабай ниндәй һүҙҙәр әйтеп туҡтата алғандыр инде, билдәһеҙ, ләкин шул ваҡыттан файҙаланып, Фәриһә еңгәй ситән аша төшөп ҡасырға өлгөргән.

Ә бына Миңлебай Ғәлим улы Юламанов (1914 йылғы), Хәмзә лә, уның улы Харис та бик ҡыйыу кешеләр ине, Харис черкес бүреге кейеп, хәрбиҙәрсә текә баҫып йөрөй торғайны, тип хәтерләй. Заманында Хәмзә Иҫәнбаев старшина ла булған. 1922 йылда Муллаҡаевтар ғаиләһе Яңы Ябалаҡлыға күсә. Һуңынан Хәмзә бабайҙың улдары Харис менән Зариф һәм ҡыҙы Зарифа Урта Азияға сығып китә. Артабанғы яҙмыштары билдәһеҙ. Ауылда улар менән хат алышыусы кешеләр ҙә ҡалмаған. Шулай итеп, ауылда Муллаҡай Иҫәнбаевтың яҙмышы тураһында мәғлүмәт табып булманы. «Һыбайлы башҡорт» һүрәтенең авторы А.Орловский ижадына арналған хеҙмәттәрҙе ҡараным, ләкин әлегә унда ла үҙемде ҡыҙыҡһындырған һорауға яуап тапманым.

А. Орловский (1777-1832 йылдарҙа йәшәгән) үҙенең бер нисә эшендә башҡорттарҙы һүрәтләй. Был һүрәттәр әлеге ваҡытта Мәскәү һәм Варшава музейҙарында һаҡлана. Орловский һуғыш күренештәрен, бигерәк тә атлы яугирҙәрҙе төшөрергә яратҡан. Бәлки уның был яратыуы 1794 йылғы поляк күтәрелеше ваҡытында тыуғандыр, сөнки

ул да күтәрелештә ҡатнаша һәм ижад юлын баш күтәреүселәрҙе һүрәтләү менән башлай. Эштәрендә ул һәр кешенең үҙенә генә хас булған һыҙаттарын күрһәтә белеүҙә ҙур оҫталыҡҡа ирешә, XIX быуат башында поляк А.О.Орловский Польшанан Россияға – Петербургҡа күсеп килә һәм ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем шунда йәшәй. Россияла ул рәссам буларак 1812 йылғы Ватан һуғышы батырҙарын һүрәтләп дан ҡаҙана.

Рәссамдың тағы ла бер хеҙмәте – "Башҡорт хәрби башлығы" ла күп бәхестәр тыуҙыра. Был һүрәттә Ҡаһым түрә төшөрөлгән тигән һүҙҙәр ҙә йөрөй, ләкин быны иҫбатлаған мәғлүмәттәр әлегә табылмаған.

Ауылымдың тарихы һәм Муллаҡай Иҫәнбаев яҙмышы менән ҡыҙыныҡһыныу мине Башҡортостан Үҙәк дәүләт тарих архивына алып килде. Бында Башҡортостан ауылдары тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр тупланған. Бындай мәғлүмәттәр Иҫке һәм Яңы Ябалаҡлы ауылдары тураһында ла бар ине.

1812 йылға тиклем Муллаҡай Иҫәнбаев ҡатыны һәм ике малайы менән Иҫке Ябалаҡлыла йәшәгән. Ә 1812 йылда бер нисә ғаилә беҙҙең ауылдан Яңы Ябалаҡлыға күсеп китә, улар араһында Муллаҡай һәм Хәсән Иҫәнбаевтарҙың ғаиләләре лә була. 1834 йылғы ревизия материалдарында отставкалағы зауряд-хорунжий Муллаҡай Иҫәнбаевтың тағы ла ике ҡатын алыуы һәм был ҡатындарҙан биш малай, бер ҡыҙы тыуыуын күрергә мөмкин. Бөтәһе бергә уның туғыҙ улы һәм өс ҡыҙы була. 1850 йылда 66 йәшлек Муллаҡай балалары менән Яңы Ябалаҡлыла йәшәп ятҡан. 1859 йылғы 10-сы ревизия материалы күрһәтеүенсә, 1856 йылда Муллаҡай Иҫәнбаев, 72 йәшенә етеп, донъя ҡуя. Был ваҡытта уның иң бәләкәй малайы – Хәмзә Иҫәнбаевтың атаһы Ҡәнзәфәргә ун йәш була. Ҡәнзәфәр һәм Хәмзә Иҫәнбаевтарҙың ҡасан Яңы Ябалаҡлынан Иҫкеһенә күсеүе билдәһеҙ, әммә улар XX быуат башында Иҫке Ябалаҡлыла көн итеп ятҡан.

XIX быуат башында Иҫке һәм Яңы Ябалаҡлы ауылдары Өфө өйәҙенең Һигеҙенсе кантонында була. Һигеҙенсе кантонға хәҙерге Кушнаренко, Шишмә, Иглин, Нуриман, Мәсетле, Ҡырмыҫҡалы һәм Өфө райондарындағы башҡорт ауылдары ингән. 1812 йылғы Ватан һуғышы башланғас, һигеҙенсе кантонда 11-се башҡорт полкы төҙөлә. Полк Өфөнән алыҫ булмаған Сәлих ауылында йыйылып, 1812 йылдың 5

**октябрндә һуғышҡа китә. Полк менән майор Мальковский етәкселек итә. Был полк, генерал Толстойҙың III округ ополчениеһына индерелеп, Украина ерҙәрендә һуғыша. 1813 – 1814 йылғы сит ил походында ла ҡатнашкан полктың Одер йылғаһына табан хәрәкәт итеүе лә билдәле.**

**1812 йылғы Ватан һуғышы тарихын яҡшы өйрәнгән тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров әйтеүенсә, ҡайһы бер башҡорт полктарының, шул иҫәптән 11-се полктың да документтары әле табылмаған.**

**Францияла булған кешеләрҙең һөйләүенә ҡарағанда, Париждағы тарих музейының бер залы башҡорт яугирҙәренә арналған. Ләкин бөгөнгә тиклем беҙҙең тарихсыларҙың уны барып күрә алғандары юҡ әле. Тарихсыларға Мәскәү һәм Санкт-петербург архивтрын да ентекләп тикшерәһе бар. Сит илдәр архивтары бөтөнләй өйрәнелмәгән тиерлек. Ғөмүмән, тарихсыларға был өлкәлә эштәр күп әле. Уларға уңыштар ғына теләргә ҡала. Ә А.О. Орловскийға килгәндә, уның башҡа һүрәттәренең күсермәһен булһа ла алып ҡайтып халыҡҡа күрһәтеү сараһын күрергә кәрәктер. А. О. Орловскийҙың үҙен дә онотторға ярамай. Яңы барлыҡҡа килгән урамдарҙың береһенә уның исемен биреү яҡшы булыр ине. Халыҡҡа эшләгән яҡшылыҡ бер ваҡытта ла онотолорға тейеш түгел.**

Ғәли Хисмәтуллин.